Мәктәпкәсә белем биреү муниципаль автономиялы учреждениеһы

“Уралкай” балалар баҡсаһы

# Телмәр үҫтереү өлкәһе

# Тема: Г.Ситдыҡова “Президент исеме” хиҡәйәһе менән таныштырыу.

# Өлкәндәр төркөмө

Әҙерләне:Ижбаева Л.К.

**Бурыстары:**

**Белем биреүсе:**

Г.Ситдыҡованың “Президент исеме”хиҡәйәһе  менән таныштырыу, Башҡортостандың тәүге президенты тураһындағы белемдәрен киңәйтеү, һорауҙарға тулы яуап бирергә өйрәтеү, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен нығытыу.

**Үҫтереүсе:** күҙаллауҙы,телмәрҙе,фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү.

**Тәрбиәләүсе:**арҙаҡлы яҡташтарыбыҙға ҡарата ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Интеграция:** Танып – белем биреү өлкәһе

**Эшмәкәрлек төрҙәре:** коммуникатив, музыка,хәрәкәт әүҙемлеге,нәфис әҙәбиәтте һәм фольклорҙы ҡабул итеү

**Йыһазландырыу:”**Аҡбуҙат" журналы - 2008, №10, альбомдар “Башҡортостандың беренсе Президенты-беҙҙең яҡташыбыҙ”,“Тәүәкән – Мортаза Ғөбәйҙулла улының тыуған ауылы”)

аудиояҙма “Эх,Мортаза ағай!”Р.Таһирова һүҙҙәре,Р.Ниғмәтов көйө,призентация “Яҙмышым – Башҡортостан”

**Дәрес барышы:**

Артикуляция күнегеүҙәре.

1. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау.

2. Тиҙәйткестәр әйтеү.

Ҡә-ҡә-ҡә – Ҡәҙриә алды ҡәләм.

Ҡа-ҡа-ҡа–Ҡадир соҡор  ҡаҙа.

Һеҙҙең Зөфәр бөҙрә булһа,

Беҙҙең Зөһрә лә бөҙрә.

Әлимә, Әсмә, Әлиә

Сәй эсәләр күмәкләп.

Өммөгөлсөм өләсәйем

Өлөштәрен өләшә.

Миңлегәле ҡурайының

Моңдарын мин тыңланым.

**Тәрбиәсе**:Балалар,беҙҙең башҡорт халҡында бик күп башҡорт исемдәре бар.Уларҙың яңғырашы ла,мәғәнәһе лә күп төрлө.

-Әйҙәгеҙ,бөгөн исемдәр тураһында һөйләшеп алайыҡ. Ҡарағыҙ әле, кемдәр ҡунаҡҡа килгән?

**Балалар**: Айгөл,Азамат.

**Тәрбиәсе:** Был исемдәр нимәне аңлата икән, кем белә?

**Балалар:** Айгөл - ай сәскәһе, Азамат - бөйөк, ғорур ир арыҫланы тигәнде аңлата.

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйтегеҙ әле, кешегә исем ни өсөн кәрәк?

**Балалар:** Исем иң элек кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү өсөн кәрәк.

**Тәрбиәсе:** Эйе, дөрөҫ, балалар. Һәр бер кешенең шәхси исеме була. Сабый донъяға килеү менән, уға ата–әсә исем ҡушып, тыуыу тураһында таныҡлыҡ ала.Һәр бер исемдең үҙенең мәғәнәһе була.Ә һеҙҙең исемдәр нимәне аңлата?

Балаларҙың яуаптары.

**Тәрбиәсе**: Бөгөн мин һеҙгә Гүзәл Ситдыҡованың “ Президент исеме” тигән хиҡәйәһе менән таныштырам.

- Өләсәй, ә һин Президент тураһында әкиәт беләһеңме? – тип һораны Һәҙиә.
- Белмәйем, белмәһәм дә һөйләйем, - тип шаяртып яуапланы ул һәм теҙеп алып китте.

- Йәшәй, ти, бар, ти, Исемдәр батшалығы. Һәр халыҡтың исемдәре урам-урам булып йәшәй, ти. Ваҡыт-ваҡыт кеше телен белгән матур алтын ҡоштар осоп килә лә, берәүһен кешеләр араһына алып китә. Ҡайһы саҡ ҡанатлы ҡунаҡтар бик оҙаҡ һайлана - иң-иң шәп исем әллә ҡайҙа йәшенә лә ҡуя, ти. Бер көндө башҡорт урамы ҡоштар һайрауына сумған.

- Беҙгә бөгөн бик яуаплы эш тапшырылды: был халыҡтың тәүге президенты булыр бәпес донъяға килде, - тип сутылданы, ти, ҡоштар башлығы.

- Ундай сабыйға берәй ғәҙәти булмаған исем ҡушырға кәрәк. Бәлки бүтән халыҡтар урамынан эҙләп ҡарарбыҙ? - тигән Исемдәр батшаһы. Бындай тәҡдимгә башлыҡ риза булмаған:

- Халҡына, халҡы билгән ерҙә йәшәгән һәм милләттәргә етәксе булыр башҡортҡа бүләкте үҙенең урамынан алабыҙ. Исем кешегә юҡҡа ғына бирелмәй бит, ә яҙмышын билдәләй. Беренсе президент донъяға килер нәҫелде беҙ күптән билдәләп ҡуйғанбыҙ инде. Шуға ла малайҙың олатаһына Рәхим тип ҡуштыҡ. Мәрхәмәтле, шәфҡәтле, аяусан булһын, тинек. Атаһының исеме - Ғөбәйҙулла, Алла ҡоло тигәнде аңлата. Иманлы, бик яҡшы кеше, тимәк. Ә үҙенә Мортаза исеме таман булыр. Мәғәнәһе - һөйөклө, һайлап ҡуйылған, артыҡ күрелгән. Мортаҙа Ғөбәйҙулла улы Рәхимов - күпме аҫыл сифаттар бирәсәк был исемдәр үҙенең эйәһенә! Ошолай тип тамамлаған ҡоштар башлығы һүҙен һәм сабыйға тәғәйенләнгән иң һәйбәт исемде суҡышына ҡыҫтырып Башҡортостанға юл алған. ("Аҡбуҙат" - 2008, №10 Гүзәл Ситдиҡова)

**Физминутка**

Бер, ике, беҙ торҙоҡ,

Сәп-сәп итеп ҡул саптыҡ.

Аяҡтарҙы бер урында

Тып-тып итеп беҙ баҫтыҡ.

Ултырҙыҡ, ҡабат баҫтыҡ,

Ултырҙыҡ, ҡабат баҫтыҡ,

Инде бер аҙ хәл алдыҡ,

Тыныс ҡына ултырҙыҡ.

**Тәрбиәсе**: Балалар, әйтегеҙсе, кем ул президент?

**Балалар**:  Ул башлыҡ, етәксе. Республикала  иң ҙур кеше.

**Тәрбиәсе**: Был хиҡәйәлә кем тураһында һүҙ бара?

**Балалар**: Киләсәктә башҡорт халҡының тәүге президенты булыр бәпестең тыуыуы тураһында бәйән ителә.

**Тәрбиәсе** : Буласаҡ ил башлығының олатаһының исеме нисек атала?

**Балалар:** Малайҙың олатаһының исеме – Рәхим.

**Тәрбиәсе**: Был исемдең мәғәнәһе нисек аңлатыла?

**Балалар:** Мәрхәмәтле, шәфҡәтле, аяусан тигәнде аңлата.

**Тәрбиәсе**: Атаһының исеме нисек атала?

**Балалар**: Атаһының исеме - Ғөбәйҙулла

**Тәрбиәсе**: Был исемдең мәғәнәһе нисек аңлатыла?

**Балалар**: Атаһының исеме - Ғөбәйҙулла, алла ҡоло тигәнде аңлата. Иманлы, бик яҡшы кеше.

**Тәрбиәсе**: Ә малайға исемде кем тип атайҙар?

**Балалар**: Мортаза. Мәғәнәһе - һөйөклө, һайлап ҡуйылған тигәнде  аңлата.

**Тәрбиәсе:** Балалар,beләһегеҙме,  Мортаза Ғөбәйҙулла улы беҙҙең яҡташыбыҙ.Ул Күгәрсен районы Тәүәкән ауылында тыуған.

(альбомдар  ҡарау "Башҡортостандың беренсе Президенты - беҙҙең яҡташыбыҙ", "Тәүәкән – Мортаза Ғөбәйҙулла улының тыуған ауылы)

-Балалар,тыңлағыҙ әле мин һеҙгә мәҡәлдәр әйтәм: "Ирҙең даны иленән, халҡы менән еренән", "Халҡым  тигән -  ир алтын".

Ошо мәҡәлдәрҙе нисек аңлайһығыҙ? (Балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:**Эйе, башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә “Ирҙең даны иленән, халҡы менән еренән” , “Халҡым тигән – ир алтын” тип дөрөҫ әйткәндәр.Сөнки М. Рәхимов ябай ауыл малайы.Ошо ауыл малайы тырышып завод директоры, һуңынан Президент булып китә.Халҡым тип йәшәй, илде күтәрә.Үҙ тыуған яғын ярата , хөрмәт итә.Шуға ла халыҡ уны әле лә онотмай, уға оло ихтирам күрһәтә, уны ярата.Сөнки ул Республика өсөн бик күп эштәр башҡарҙы, Башҡортостаныбыҙҙы күтәрҙе.

-Шуға күрә лә уға бағышлап йырҙар,шиғырҙар ижад ителә.

-Әйҙгеҙ,яҡташыбыҙ Ғәзим Ильясов башҡарыуында уның тураһында йыр тыңлап алайыҡ.

Йыр “Эх,Мортаза ағай!”(Йыр М.Ғ.Рәхимовтың тормошо тураһындағы презентация менән үрелеп барыла)